02-04

Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение средняя общеобразовательная школа с.Ургаза
муниципального района Баймакский район Республики Башкортостан

| **Рассмотрено и принято** | **«Согласовано»** | **«Утверждаю»** |
|---|---|---|
| на заседании МО учителей башкирского языка и литературы | Заместителем директора по УВР | Директор школы |
| Руководитель ________/Хисаметдинова Г.З. | ____________/Минишева З.Х./ | ________/Макатова З.Р./ |
| Протокол № 1 от «21» августа 2015г. | «28» августа 2015г. | Приказ № 71 от «28» августа 2015г. |

Рабочая программа
по башкирскому (государственному) языку для 9 класса
учителя башкирского языка и литературы первой категории
Хисаметдиновой Гульниры Зуфаровны
на 2015-2016 учебный год

**с.Ургаза-2015**

**Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 9-сы класы өсөн башҡорт (дәүләт) теленән эш программаһы.**

**Аңлатма яҙыу.**

Эш программаһы 68 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 2 сәғәт), шул иҫәптән яҙма эштәргә: контроль диктант – 4, инша – 2, изложение – 1 сәғәт ҡаралған.
**Төҙөүсеhе :** Хисаметдинова Гөлнира Зөфәр ҡыҙы.
**Дәреслек:** Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 9-сы класы уҡыусылары өсөн дәреслек. Төҙөүселәре: Ғәбитова З.М., Усманова М.Ғ. – Өфө: Китап, 2005.
**Программа кимәле :** базис
**Программа үҙенсәлектәренең характеристикаhы:**
Эш программаhы Башҡортостан Республикаhы Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланған «Башҡорт теленән программа» (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең I-IX кластары өсөн) нигеҙендә төҙөлдө. Төҙөүселәре Толомбаев Х. А., Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З. М., Усманова М. Г.- Ижевск: «КнигГрад», 2008.

Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Башҡортостан Республикаhы муниципаль район Баймаҡ районының Урғаҙа ауылы урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһының « Уҡыу планы»на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.
**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла** :

- «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
- Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы;
- Башҡортостан Республикаһының “Мәғариф тураһында” Законы;
- Башҡортостан Республикаһының “Уҡытыу һәм тәрбиә биреү” концепцияһы;
- Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы.

**Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар:**

1.Уҡыусыларҙы башҡорт телендә һөйләгәнде, уҡығанды, тыңлағанды аңларға өйрәтеү (аудирование).
2.Башҡорт өндәрен, һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеп, үҙ-ара һөйләшергә, тәҡдим ителгән темалар, ситуациялар буйынса һөйләргә өйрәтеү (говорение).
3.Дәреслектәге текстарҙы, башҡорт телендә сыҡкан гәзит-журналдарҙы үҙ аллы һәм аңлы уҡыу күнекмәләре биреү (чтение).
4.Әйтелеше ауыр булмаған һүҙҙәрҙән торған һөйләмдәрҙе күсереп һәм үҙ фекерҙәрен билдәле кимәлдә үҙ аллы яҙыу күнекмәләрен булдырыу (элементарное письмо).
5. Башҡорт телен өйҙә, йәмғиәт тормошонда, хеҙмәт процесында практик файҙалана белергә өйрәтеү.

6. Башҡорт телен практик өйрәнеүгә бәйләп, балаларҙы башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, милли йолалары, күренекле шәхестәре һ.б. менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, үҙҙәре йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.

Программа телде 3 йүнәлештә :

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу;
- телдең системаһын ( фонетика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү;
- бәйләнешле текст менән эшләргә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота.

**Программаның йөкмәткеһе һәм төҙөлөшө.**

Рус һәм башҡа мәктәптәрҙә телде белмәгән балаларға башҡорт телен өйрәтеүҙең байтаҡ үҙенсәлектәре бар. Уларҙың иң мөһимдәрен һанап китәбеҙ:

1.Балаларҙы һөйләшергә өйрәтеү  үҙәк бурыс.

2.Был дәрестәрҙә балаларҙы башҡортса һөйләшергә, уҡырға, элементар яҙырға өйрәтеү бергә алып барыла. Тел менән әҙәби материалдары бергә ҡушып өйрәнелә (интеграция).

3.Башҡорт теле мотлаҡ практик рәүештә өйрәнелә. Лингвистик һәм әҙәби күренештәр, уҡыу материалы нигеҙендә, практик ҡулланыу маҡсатынан сығып өйрәнелә (коммуникатив йүнәлеш).

Программала материалдар тематик принципта урынлаштырыла.Сөнки был принцип һүҙҙәрҙе, типик фраза һәм һөйләмдәрҙе өйрәнеүгә ыңғаә йоғонто яһай, уҡытыусыға уҡытыу-тәрбиә эшен системалы, эҙмә-эҙ ойошторорға ярҙам итә.

5-11 кластарҙа, башланғыс кластарҙағы кеүек, уҡыу материалы биреү дауам иттерелә. Әҫәрҙәрҙе өйрәнеү башҡорт халҡының күренекле яҙыусылары, шәхестәре, халыҡтың психологияһы, ғөрөф-ғәҙәттәре, йолалары, тарихы менән таныштырыу маҡсатында алынған.

Программала һәр тема һайын тип әйтерлек грамматика буйынса үтеләсәк темаларҙың исемдәре бирелә. Грамматик материалды үҙләштереү уҡыу өсөн бирелгән әҫәрҙәр өҫтөндә эшләгәндә һәм уҡытыусы тарафынан теманы аңлатыу өсөн алынған махсус күнегеүҙәр ярҙамында тормошҡа ашырыла.

**9 синыфтың урыҫ төркөмөнә тематик план**

| № | тема | сәғәт | шул иҫәптән | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | диктант | инша | излож. |
| 1 | Һаумы,мәктәп! | 7 | 1 | | |
| 2 | Ергә мәрхәмәт – илгә бәрәкәт. | 8 | 1 | | |
| 3 | Атамалар ни һөйләй? | 8 | | 1 | |
| 4 | Беҙ ҡышты ла яратабыҙ. | 7 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 5 | Башҡорт театры. | 4 | 1 | | |
| 6 | Башҡорт халыҡ ижады. | 7 | | | 1 |
| 7 | Башҡорт аты. | 8 | | | |
| 8 | Башҡорт милли аштары. | 7 | 1 | 1 | |
| 9 | Яҙ килә. | 11 | 1 | | |
| 10 | Йомғаҡлау дәресе. | 1 | | | |
| | **Бөтәһе-68 сәғәт** | | | | |

## Уҡыу предметының төп йөкмәткеһе

**Һаумы, мәктәп! - (7 сәғәт)**

Эш төрҙәре «Көҙ» темаһы менән берлектә алып барыла. «Көҙ» һәм «Мәктәп» темаһына шиғырҙар, әҫәрҙәр уҡыу; мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар, һынамыштарҙы иҫкә төшөрөү.

Алдағы кластарҙа үтелгәндәрҙе системалаштырыу, яңы мәғлүмәт менән таныштырыу. Һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш дауам итә.

**Ергә мәрхәмәт – илгә бәрәкәт.- 8 сәғәт.**

Тыуған Республикаға ҡарата мөхәббәт, ғорурлыҡ тойғоһо, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләргә. Улар тураһында һөйләргә, яҙырға өйрәтеү. Башҡортостандың ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары тураһында әңгәмәләр үткәреү, экскурсиялар ойоштороу.

**Атамалар ни һөйләй? - 8 сәғәт.**

Кеше тормошонда атамаларҙың да (кеше исеме, фамилияһы, атаһының исеме; ауыл, ҡала, тау, йылға һ.б.) роле ҙур. Унһыҙ тормошто күҙ алдынала килтереп булмай. Атамалар бик күп. Тел ғилемендә уларҙы өйрәнеүсе фән бар. Ул – ономистика. Онамистика фәне үҙе бер нисә тармаҡтан тора: антропонимика, этнонимика, милли, халыҡ, ҡәбилә исемдәрен, зоонимика ҡош-ҡорт, хайуан ҡушаматтарын, космонимика өйрәнеүсе фән.

Был теманы үтеү уҡыусының бала саҡтан уҡ үҙҙәре йәшәгән ауыл, ҡала, уларҙың янындағы атамаларҙың мәғәнәләрен белергә теләгән ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерә, тыуған төйәк менән ғорурланырға мөмкинлек бирә. Сөнки атамаларҙа ил тарихы, ер һәм ошо ерҙә йәшәгән халыҡтың тел үҙенсәлектәре, халаҡ тормошо, ғөрөф-ғәҙәте, йолалары һ.б. сағыла.

**Беҙ ҡышты ла яратабыҙ. - 7 сәғәт.**

Бәйләнешле телмәрҙең яҙма һәм телдән формаларына берҙәй әһәмиәт бирелә. Ҡыш миҙгеле, уның үҙенсәлектәре тураһында һөйләү күҙ уңында тотола.

**Башҡорт театры. - 7 сәғәт.**

Башҡортостанда театр сәнғәте. Республикалағы театрҙар һәм уларҙың эшмәкәрлеге хаҡында дөйөм мәғлүмәт биреү. М.Ғафури исемендәге Башҡорт Академия драма театрының барлыҡҡа килеүе тарихы (халыҡ артистары З.Бикбулатова, А.Мөбәрәков, Г.Мөбәрәкова). Театорҙың күренеклк артистарының тормошо һәм ижады менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

Театрҙың үткәне һәм киләсәге буйынса фекер алышыу ойоштороу.

**Башҡорт халыҡ ижады. -7 сәғәт.**

Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә. Фольклорҙың коллектив ижад булыуы. Фольклор һәм яҙма әҙәбиәттең айырмаһын билдәләү, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

**Башҡорт аты. - 8 сәғәт.**

Уҡыусылырҙы башҡорт атының килеп сығыуы, тарихи үткәне менән таныштырыу. Аттарҙың кеше тормошондағы мөһим ролен билдәләү. Йәш үһенсәлектәре буйынса бүленеүен билдәләү, уҡыусылырҙан дөрөҫ итеп әйттереү. Аттарға ҡарата ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, улар тураһында күберәк белеү теләге тыуҙырыу.

**Башҡорт халыҡ милли аштары. - 7 сәғәт.**

Башҡорт халҡының милли аштары менән таныштырыу. Уларҙы әҙерләү үҙенсәлектәренбилдәләү. Башҡорт милли аштары тураһында текстар менән таныштырыу.

Уҡыусылырҙың һөйләү, яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә ентеклк эш дауам итә.

**Күңелле яҙ килә. - 11  сәғәт.**

Башҡортостандағы яҙғы тәбиғәт күренештәре.  Ҡала һәм ауылда яҙғы эштәр: ҡоштар, хайуандар һәм үҫемлектәр тормошо, яҙғы байрамдар тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу. Дарыу үләндәренән гербарийҙар төҙөү, Еңеү көнөн билдәләү. Һуғыш ветерандары менән осрашыу, иҫтәлектәр яҙып алыу буйынса эш

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

1. Ҙур булмаған эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү. Художество әҫәрҙәрҙе инсценировкалау.
2. Уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында героаға характеристика биреү;

- тәҡдим ителгән әҫәргә тәржемә итә белеү, таныш булмаған һүҙҙәрҙе айыра белеү;
- 10-12 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
- эпик, лирик, лиро-эпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.

3. Һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға баһалама биреү;
   - уҡылған әҫәрҙәргә үҙ мөнәсәбәтеңде белдерә белеү.
4. Телмәр ағышында өндәрҙең үҙгәреүен айыра һәм аңлата белеү;
   - диалогтарҙа башҡа кешеләрҙең телмәрендәге орфоэпик хаталарҙы күҙәтә һәм төркөмләй белеү;
   - һүҙлектәр менән файҙалана белеү;
   - диктант, изложение һәм иншалар яҙыу;
   - өндәш һүҙҙәр, улар эргәһендә тыныш билдәләренең ҡуйылышы;
   - һүҙҙәрҙе яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙарҙың килеү тәртибе (рус теле менән сағыштырыу).
   - үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәрҙең телмәрҙәге роле.

**Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау**

1.Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.
Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

2.Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.
3.Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана. Бының өсөн башҡорт теленән һәр класта түбәндәге күләмдә контроль эштәр, яҙма эштәр үткәреү ҡарала.

| Яҙма эш төрҙәре | һаны |
|---|---|
| Диктант | 5 |
| Изложение | 1 |
| Инша | 2 |

Яҙма эш төрҙәре (изложение,инша) яҙыу уҡыусыларҙың уҡыу кимәленә, белеменә, мөмкинселегенә ҡарап уҡытыусы ҡарамағына ҡалдырыла һәм улар урынына шул уҡ күләмдә түбәндәге яҙма эштәр үткәрергә мөмкин:

-карточкалар менән эш;
-тест;
-һүрәт буйынса һөйләмдәр төҙөү;
-текста һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе;
-терәк текстар менән инша яҙырға өйрәнеү:
-һүҙлек диктанты;
-һөйләмдәр төҙөү;
-һүҙлек менән эш;
-һүрәтләү иншаһы.

**9 синыфка башҡорт (дәүләт) теленән календарь – тематик план.**

| № | Тема | сәғәт | Дата | | иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | **План.** | **Үткәр.** | |
| 1-се сирек – 18 сәғәт. | | | | | |
| **Һаумы мәктәп. 7 сәғәт.** | | | | | |
| 1. | А.Игебаев” Бик тә кәрәк тыныслыҡ”. | | 2.09. | | |
| 2. | К.Мәргән “Мәктәп.” | | 3.09. | | |
| 3. | М.Кәрим.” Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”(өҙөк). Һүҙбәйләнеш. | | 9.09. | | |
| 4. | М.Аҡмулла. “Көҙ”. Антонимдар. | | 10.09. | | |
| 5. | Аҡкош. Осоу юлдары. Эйә менән хәбәр. | | 16.09. | | |
| 6. | Т.ү.ИншаЧехов Башҡортостанда | | 17.09. | | |
| 7. | **Аңлатмалы диктант “Көн исемдәре”.** | | 23.09. | | |
| **Ергә мәрхәмәт – илгә бәрәкәт. 8 сәғәт.** | | | | | |
| 8. | Хаталар өҫтөндә эш. Эйәрсән киҫәктәр | | 24.09. | | |
| 9. | Т.Ғәниева. “Оло ялан”. | | 30.09. | | |
| 10. | Р.Ғарипов Кеше. Хәлдәр. | | 1.10. | | |
| 11. | Башҡорттар ҡайҙан килеп сыҡҡан? | | 7.10. | | |
| 12. | Ҡыҙыл китап.Урын хәле.Ваҡыт хәле. | | 8.10. | | |
| 13. | Ф.Мөхәмәтйәнов.”Ғүмер.”Рәүеш хәле. | | 14.10. | | |
| 14. | А.Игебаев” Донъябыҙҙан ни ҡала?Ҡылым | | 15.10. | | |
| 15. | **Контроль диктант” Октябрь** | | 21.10. | | |
| **Атамалар ни һөйләй? 3 сәғәт.** | | | | | |
| 16. | Хаталар өҫтөндә эш. | | 22.10. | | |
| 17. | Атамалар ни һөйләй Күләм-дәрәжә хәле. | | 28.10. | | |
| 18. | Октябрьский ҡалаһы. | | 29.10. | | |
| **2-се сирек. 16 сәғәт.** | | | | | |
| **Атамалар ни һөйләй? 5 сәғәт.** | | | | | |
| 19. | Ҡ.Аралбай”Каруанһарай”.Шарт хәле. | | 5.11. | | |
| 20. | Д.Мырҙаҡаева. “Өфө һыҫары”. | | 11.11. | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 21. | “Хан менән Алдар” көләмәсе.Сәбәп хәле | | 12.11. | | |
| 22. | Р.Насыров.” А.Матросов”.Маҡсат хәле. | | 18.11. | | |
| 23. | **Иҫкәртмәле диктант “Талҡаҫ күле”.** | | 19.11. | | |
| | **Беҙ ҡышты ла яратабыҙ. 7 сәғәт.** | | | | |
| 24. | Хаталар өҫтөндә эш. Ф.Рәхимғолова. “Ҡыш”. | | 25.11. | | |
| 25. | Ш.Бабич. “Ҡышҡы юлда” | | 26.11. | | |
| 26. | Н.Мусин. “Уралда ҡыш”. Өндәш һүҙ. | | 2.12. | | |
| 27. | Ҡышҡы көн | | 3.12. | | |
| 28. | Ҡышҡы Нардуған. Ҡышҡы байрамдар. | | 9.12. | | |
| 29. | Р.Шәкүр. “Яңы йыл”. | | 10.12. | | |
| 30. | Тымаулағанда. | | 16.12. | | |
| | **Башҡорт театры. 4 сәғәт.** | | | | |
| 31. | Ф.Фәткуллин “Өфөлә театрҙар”. Өҫтәлмәлек. | | 17.12. | | |
| 32. | **Контроль диктант.** “Коштарҙы ашатығыҙ!” | | 23.12. | | |
| 33. | Хаталар өҫтөндә эш.А.Мөбәрәков.Сағыштырыу | | 24.12. | | |
| 34 | Нурия Ирсаева.Хөсәйен Ҡудашев.Йомғаҡлау | | 30.12. | | |
| | **3-сө сирек. 18 сәғәт.** | | | | |
| | **Башҡорт халыҡ ижады.7 сәғәт.** | | | | |
| 35. | Ә Сөләймәнов.”Халыҡ ижады”. Һөйләм | | 20.01. | | |
| 36. | «Урал батыр» эпосы тураһында. Һандар. | | 21.01. | | |
| 37. | “Алпамыша батыр” әкиәте. Бер составлы һөйләмдәр. | | 27.01. | | |
| 38. | Әкиәттең 2,3 бүлектәре | | 28.01. | | |
| 39. | Башҡорт халыҡ ижадында һандар. | | 3.02. | | |
| 40. | **Т.ү.Изложение “** Халыҡ ижады”. | | 4.02. | | |
| 41. | Хаталар өҫтөндә эш.Таҡмаҡтар. | | 10.02. | | |
| | **Башҡорт аты. 8 сәғәт.** | | | | |
| 42. | Н.Иҙелбаев. “Ел, ерәнем”йыры. | | 11.02. | | |
| 43. | Б.Байым. “Бәләкәс” хикәйәһе. | | 17.02. | | |
| 44. | Башҡорт аты ниндәй була? | | 18.02. | | |
| 45. | Халыҡ йыры “Кара юрға”. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. | | 24.02. | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 46. | Тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре | | 25.02. | | |
| 47. | М.Кәрим. “Минең атым” шиғыры. | | 3.03. | | |
| 48. | Ә.Әминев. “Турат”(хикәйәнән өҙөк). | | 4.03. | | |
| 49. | С.Агиш. “Турыҡай”. | | 10.03. | | |
| **Башҡорт халыҡ милли аштары. 3 сәғәт.** | | | | | |
| 50. | Икмәк. Ҡымыҙ. Бал. Ҡушма һөйләмдәр. | | 11.03. | | |
| 51. | **Контроль диктант.”** Башҡорт милли ашһыуҙары”. | | 17.03. | | |
| 52. | Хаталар өҫтөндә эш. Һ.Дәүләтшина “Ялсылыкта”. | | 18.03. | | |
| **4-се сирек. 15 сәғәт.** | | | | | |
| **Башҡорт халыҡ милли аштары. 4 сәғәт.** | | | | | |
| 53. | З.Биишева. “Дуҫ булайыҡ”(әҫәрҙән өҙөк). | | 1.04. | | |
| 54. | Ә.Байрамов. “Сүпрә” хикәйәһе. | | 7.04. | | |
| 55. | В.Ғүмәров “Ҡорот”. | | 8.04. | | |
| 56. | Тәржемә эше.С.Шитова”Деревянная утварь”. | | 14.04. | | |
| **Яҙ килә. 11 сәғәт.** | | | | | |
| 57. | Х.Мәхмүтов. “Апрель”. Һынамыштар. | | 15.04. | | |
| 58. | Я.Хамматов. “Яҙ башланды”. Мәҡәлдәр. | | 21.04. | | |
| 59. | А.Игебаев. “Яҙ бүләге” шиғыры. | | 22.04. | | |
| 60. | Л.Фархшатова “Тал бөрөһө” хикәйәһе. | | 28.04. | | |
| 61. | Ғ.Дәүләди. “Нөгөш шишмәләре” шиғыры. | | 29.04. | | |
| 62. | **Контроль диктант”** Июнь”. | | 5.05. | | |
| 63 | Хаталар өҫтөндә эш. Ф.Ғөбәйҙуллина. “Сөгөлдөр”. | | 6.05. | | |
| 64. | Ф.Ғөбәйҙуллина.” Сөгөлдөр” хикәйәһе. | | 12.05. | | |
| 65. | Т.ү.Ә.Лотфуллиндың “Хушлашыу” картинаһы буйынса инша. | | 13.05. | | |
| 66. | Л.Арыҫланова. “Өс әхирәт” әкиәте. | | 19.05. | | |
| 67. | Д.Мырҙаҡаева. “Йәйҙең хушлашыу айы”. | | 20.05. | | |
| 68. | Йомғаҡлау дәресе. | | 23.05. | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | **Бөтәһе – 68 сәғәт** | | | | |

**Уҡыу - укытыу методик ҡулланмалар исемлеге**

1. Ғәбитова З.М. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 9-11се кластары өсөн “Башҡорт теле” дәреслегенә методик күрһәтмәләр.- Өфө, 2009.
2. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. – Өфө, 2009. – 128 бит.
3. Усманова М. Г.  Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа. – Өфө, 2007.
4. Дәүләтшина М.С. Башҡорт телен укытыу методикаһы.1-се киҫәк. – Өфө, 2010. – 120 бит.
5. Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З.М. Башҡорт телен укытыу методикаһы.2-се киҫәк. – Өфө, 2011. – 88 бит.
6. Аслаев Т. Х., Атнағолова С.В. Телмәр үҫтереү буйынса сюжетлы картиналар.-Өфө: Китап, 1996.
7. Раҡаева Ә.С., Дәүләтшина М.С. Башҡорт теленән контроль һорауҙар, тестар ҡулланмаһы. - Өфө: Педкнига, 2008.
8. Интерактив электрон дәреслек, 9 синыф, Ғәбитова З.М.,Усманова М.Ғ.,2011 й

**Һүҙлектәр**

1. Аҙнағолов Р.Ғ.Башҡортса-русса мәктәп һүҙлеге. – Өфө: 2002.
9. Русско-башкирский учебный словарь / Саяхова Л.Г., Ураксин З.Г., Асадуллина Ф.Ф., Сахипова З.Г. Под редакцией Саяховой Л.Г. и Ураксина З.Г. – Уфа: Китап, 2001.
10. Ураҡсина З.Ғ. Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. – Яңыртылған икенсе баҫма. - Өфө: Китап, 2006.
11. Әхтәмов М.Х.Башҡорт теленең антонимдар һүҙлеге. – Өфө: Китап, 1987.

**Материаль-техник ҡулланмалар**

1. телевизор;
2. компьютер;
3. магнитофон.

**Әҙәбиәт исемлеге**

1. Ғәбитова З.М., Усманова М.Ғ. Башҡорт теле: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 9-сы класы уҡыусылары өсөн дәреслек. – Өфө : Китап, 2006.
2. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы: Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5 – 11 класс уҡыусылары өсөн ҡулланма. - Өфө: Китап, 2002.
3. Алдырханова- Кәримова Ә.Р. Салауат батыр – ир икән. - Өфө: Китап, 2009.
4. Абубакирова З.Ф.Башкирский язык в таблицах и схемах. Уфа, 2009.
5. “Аҡбуҙат”, “Аманат” журналдары.